*Миңнулла ӘБСӘЛӘМОВ,*
*Яңауыл район үҙәк дауаханаһының*
*күҙ микрохирургияһы бүлексәһе мөдире*

# МӘСКӘҮГӘ ЛӘ БАРЫУ КӘРӘКМӘЙ

Һуңғы йылдарҙа беҙҙең илдә халыҡҡа офтальмохирургик ярҙам күрһәтеү бермә-бер яҡшырҙы. Күҙҙең төрлө ауырыуҙарын хирургик юл менән дауалауҙың өр-яңы ысулдары табылды, бөтә Рәсәй буйынса заманса йыһазландырылған клиникалар асылды. Хәҙер төпкөл төбәктәрҙә йәшәгән халыҡҡа күҙенә операция яһатыу өсөн Мәскәүгә барып йөрөргә кәрәкмәй.

Башҡортостандың Өфөнән алыҫ урынлашҡан райондарынан башҡалаға күҙе ауырыған кешегә барыу өсөн байтаҡ юл ғазабы кисерергә тура килә ине. Һуңғы йылдарҙағы иҡтисади ҡыйынлыҡтар хәлде тағы ла ауырлаштырҙы. Табиптар алдына махсус медицина ярҙамын күрһәтеүҙе халыҡҡа яҡынайтыу бурысы килеп баҫты. Шуға күрә Өфө күҙ ауырыуҙары ғилми-тикшеренеү институты һуңғы йылдарҙа республика халҡына офтальмохирургик ярҙам күрһәтеү өсөн төбәктәрҙә күҙ микрохирургияһы бүлексәләре асты: Сибай, Учалы, Яңауыл ҡалаларында, Малаяҙҙа хәҙер тәжрибәле офтальмологтар эшләй. Өфө күҙ ауырыуҙары ғилми-тикшеренеү институты директоры М.Т.Аҙнабаев етәкселегендә алып барылған бындай мөнәсәбәт урындарҙа күҙ ауырыуҙарын дауалау сифатын яҡшыртырға, эшләнгән операцияларҙың төрҙәрен киңәйтергә мөмкинлек бирҙе.

Яңауылда төбәк-ара күҙ микрохирургияһы үҙәген асыу уйын район хакимиәте башлығы Нәзир Заһит улы Зиязов хуплап ҡаршы алды һәм ҡулынан килгәндең барыһын да эшләне. Район дауаханаһының баш табибы Марс Ахунов та ҙур ярҙам күрһәтте. М.Т.Аҙнабаев үҙәк өсөн медицина ҡорамалдары юлланы. Был эштә «Краснохолмскнефть» нефть һәм газ сығарыу идаралығы тос ярҙам күрһәтте. Бына шулай, Яңауылда күҙ ауырыуҙары бүлексәһе базаһында күҙ микрохирургияһы үҙәге асылды.

Яңауыл районында офтальмология тарихы биттәренә күҙ йүгертеп үтеү ҙә урынлы булыр ине. Бында һуғыштан һуңғы йылдарҙа уҡ күҙ ауырыуҙарын дауалағандар. 1951 йылда Яңауыл район үҙәк дауаханаһына Башҡорт дәүләт медицина институтын тамамлаған Р.Ҡ.Ғарипова эшкә ебәрелә. Ошо дәүерҙә республикала трахомаға ҡаршы әүҙем көрәш башланғас, 1953 йылдың октябрендә районда 35 кешегә иҫәпләнгән трахомаға ҡаршы диспансер асылып, унда баш күҙ табибы итеп Р.Ҡ.Ғарипова тәғәйенләнә. Әүҙем рәүештә дауалау һәм профилактика үткәреү һөҙөмтәһендә трахома сире бөтөрөлә. 1959 йылда был диспансер күҙ ауырыуҙары бүлексәһе итеп үҙгәртелә. Бик күп йәш табиптар, шәфҡәт туташтары үҙҙәренең хеҙмәт юлын ошонда башлай. Улар араһында Рәсәй Медицина фәндәре академияһының (Мәскәү) Күҙ ауырыуҙары ғилми-тикшеренеү институтының директоры урынбаҫары, медицина фәндәре докторы И.А.Мостаев, республика дауаханаһында баш табип булып эшләгән, БАССР Һаулыҡ һаҡлау министрлығының баш күҙ табибы булған М.Ш.Сәйетов, Өфө күҙ ауырыуҙары ғил-



*Миңнулла Шәрәфетдин улы Әбсәләмов 1966 йылда Ғафури районының Красноусольск ҡасабаһында тыуған. Башҡорт дәүләт медицина институтын тамамлағас, 1989-94 йылдарҙа Өфө күҙ ауырыуҙары ғилми-тикшеренеү институтында кесе ғилми хеҙмәткәр булып эшләй. 1994 йылда М.Ш.Әбсәләмовты Яңауылда асылған күҙ микрохирургияһы үҙәге мөдире итеп тәғәйенләйҙәр.*

ми-тикшеренеү институтының глаукома һәм күҙ ҡылауы бүлексәһе мөдире М.З.Йәнгирова һ.б. бар.

Әле район офтальмологтары райондың үҙәк дауаханаһындағы ике кабинетта ауырыуҙарҙы ҡабул итә. Бынан тыш, балаларҙың күҙен һаҡлау кабинеты эшләй, 25 кешелек стационар бар. Унда В.С.Вәлиева, А.Ф.Солтанова, Ф.У.Әүхәҙиева, В.З.Әбсаттарова кеүек тәжрибәле күҙ табиптары дауалай.

Күҙ микрохирургияһы үҙәге асылыу районда офтальмология ярҙамын тамырынан яңыртыуға булышлыҡ итте. Бүлексә Японияла, Германияла, АҠШ-та етештерелгән заманса диагностика һәм дауалау ҡорамалдары менән йыһазландырылған. Был иһә төрлө күҙ ауырыуҙарын тейешле кимәлдә дауалау мөмкинлеген бирә. Матур һәм уңайлы оптика, аныҡ һәм камиллашҡан техника ярҙамында район офтальмологтары уңышлы микрохирургик операциялар үткәрә. Ошо ваҡыт эсендә үҙәктә 1500-ҙән ашыу операция үткәрелеп, шуның йөҙҙән ашыуы ҡылауға ҡаршы булған. Бөгөн беҙҙең үҙәктә яңауылдар ғына түгел, күрше төбәктәрҙән килгән кешеләрҙә дауалана.

Үҙәктә яһалма күҙ яҫмағын күсереп ултыртыу операциялары һаны йылдан-йыл арта. Мәҫәлән, 1999 йылда күҙен ҡылау ҡаплаған 106 кешегә операция яһалып, шуларҙың алтмыш дүртенә яһалма күҙ яҫмағы, ә үҙәк асылғандан алып 200 кешенең күҙенә ошондай яҫмаҡ ҡуйылды. Диаметры 6 миллиметр ғына булған был линза кешенең күреү һәләтен ҡайтара, тормош матурлығын тойоп йәшәү мөмкинлеген аса. Һуҡыр кеше өсөн шунан да ҙурыраҡ бәхет бармы икән?!

Тағы шуны әйтеп үтергә кәрәк: беҙ яҫмаҡ юллап сит илгә йөрөмәйбеҙ. Өфө күҙ ауырыуҙары ғилми-тикшеренеү институты үҙе етештерә уны. Был иһә ошо уникаль операцияны байтаҡҡа осһоҙайтты, өҫтәүенә уның сифаты ла юғарыраҡ.

Күҙ ауырыуҙарын дауалауҙа, операциялар яһағанда өлкән шәфҡәт туташы З.Хазбулатова, шәфҡәт туташтары Н.Мәнекәйева, Р.Шәрәфетдинова, А.Андарова, З.Шабаева, операция шәфҡәт туташы В.Камалетдиновалар ҙур ярҙам күрһәтә.

Ғөмүмән, үҙәктә эшләгән һәр кем ауырыуҙарға ҡулынан килгәнсә ярҙам итергә тырыша. Был иһә табиптарҙың изге бурысы.